# Артикуляцион күнегеү

- һе-һе-һе-һе
- һа-һа-һа-һа
- һү-һү-һү-һү
- һә-һә-һә-һә



# Фонетик –орфоэпик күнегеү.

Ерҙәге бөтә әсәләр
Оҙон ғүмерле булһын!
Бала булған һәр бер йортта
Йылмайып ҡояш көлһөн.





Берҙән-берем, күҙ нурым,
тип
Сирләгәндә төн йоҡламай,
Иркәләй һине, һөйә,
Зарыңды белә, көйә.
Кем һуң ул һинең өсөн?
(Ул –һөйөклө әсәйем!)





# К.Кинйәбулатова
# «Әсә күңеле»

# Дәрестең маҡсаты.

- К.Кинйәбулатованың ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү, унын ижадына хөрмәт тәрбиәләү.
- Шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡырға өйрәтеү, бәйләнешле телмәр үҫтереү.
- Әсәләргә ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләү, изгелекле, иғтибарлы, һиҙгер күңелле булырға өйрәтеү.



# Кәтибә Кинйәбулатова



К.Кинйәбулатова Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Мәүлит  ауылында 1920 йылда донъяға килгән. Ауылының күркәм тәбиғәте, йырлы-моңло, әкиәтле ғаиләһе Кәтибә Кинйәбулатованы  шағирә итеп тәрбиәләй. Бәләкәстән мөғжизәләргә ышаныусы. Рәссам да, музыкант та булырға хыялланыусы ҡыҙ башланғыс белемде тыуған ауылында үҙ атаһынан ала. Һуңынан Мөхәмәтҡолой мәктәбен тамамлай һәм Өфөгә килеп, Педрабфакта уҡырға инә. Уҡытыусы һөнәрен үҙләштергәс, 1941-1953 йылдарҙа Силәбе өлкәһендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй.Бер ваҡытта ла әҙәбиәттән, йыр – шиғырҙан, яратҡан музыка ҡоралы – мандолинаһынан айырылмай.



Донъяны бала күҙе һәм сафлығы менән ҡабул иткән  оло йөрәкле шағирә К. Кинйәбулатова кескәйҙәр өсөн дә күп әҫәрҙәр ижад итә.

# Китаптары

“Тәүге сәскәләр” (1954), “Йәшел япраҡтар” (1958), “Бала –нур” (1961), “Әнисә” (1960), “Һүнмәҫ мөхәббәт” (1962), «Атай тауышы» (1964), «Бөркөт»(1966), “Һайланма әҫәрҙәр”(1970), “Айгүзәлдең алтын асҡысы”(1970), “Һүҙ - тереләргә”(1971), “Партизан ейәнсәре”(1974), “Әсә һулышы”(1980), “Турғай ҡыуаныстары”(1995), “Йөрәк тауышы”(1998), “Һайланма әҫәрҙәр”(2005), “Ветерандар”(2010)



Бишенсе февраль.

Класс эше.

**Кәтибә Кинйәбулатова**

**“Әсә күңеле”.**



# Һүҙлек эше.

- *күңел-душа*
- *тәрән-глубокая, глубоко*
- *диңгеҙ-море*
- *уңалмаҫлыҡ яра-незаживающая рана*
- *йөрәк яраһы-душевная боль*



Ауырлыҡтың барын онота ул –
Балаһының бәхете хаҡына
Тик балалар әсәй күңелдәрен
Аңлай алмай ҡала йыш ҡына.

**Был юлдарҙа әсәйҙәрҙең тағы ниндәй һыҙаттары асыла?**



# Һорауҙар

- Ни өсөн шиғырҙа әсә күңеле диңгеҙ менән сағыштырыла?
- Уҡыусылар, әсәйҙәрҙе, уларҙың күңелен тағы ла нимә менән сағыштырырға, нимәгә оҡшатырға була?



# Ял минуты.

Уң күҙеңде ҡыҫып ал да,
Һул күҙеңде ҡыҫып ал.
Шунан тәҙрә аша
Күк офоҡҡа күҙең һал.
Ике күҙеңде йомда
Бер минутҡа йоҡлап ал,
Уңға, һулға башың сайҡа,
Бына шулай була ял.



Әсәй – ер йөҙөндәге иң ҡәҙерле, изге кеше. Бала яҙмышына ҡағылған һәр ваҡиға уның тоғро йөрәге, һиҙгер күңеле аша үтә. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә лә ошо хаҡта һүҙ бара.



# Әсә һүҙе мәҡәлдәрҙә

- Әсә өйгә нур сәсә.
- Әсә күңеле - балала, бала күңеле - далала.
- Әсә ҡамсыһы –мамыҡтан, атай һүҙе – тимерҙән.
- Әсәһенә өргән эт бүре ауыҙына төшөр.
- Әсә ҡулы – им.
- Әсә өйҙә - ҡот өйҙә.



# Блиц турнир.

1. Әсәйегеҙҙең тыуған йылы, айы, көнө.
2. Яратҡан сәскәһе.
3. Яратҡан ашы.
4. Яратҡан телетапшырыуы.
5. Йырсыһы һәм йыры.



Өй эше.
Шиғырҙы тасуири уҡырға.

Һау булығыҙ.

Башҡарҙы: Әхәтова Әминә
Сәфәрғәли ҡыҙы